**Тест 3.**

**1. М. Өмөтбаев ҡайһы йылдарҙа йәшәгән?**

*а) 1831 —1896; г) 1871 —1931; б) 1889—1976; г) 1859—1936. в) 1841—1907;*

**2. М. Өмөтбаев төп белемде ҡайҙа ала?**

*а) Ырымбурҙа; г) Дәуләкәндә; б) Ҡарғалыла; г) Троцкиҙа. в) Өфөлә;*

**3. М. Өмөтбаевтың «Татар нәхүһенең мохтасары» тигән хеҙмәте ниндәй өлкәгә ҡарай?**

*а) тарихҡа; в) фольклорға; б) әҙәбиәт өлкәһенә; г) тел белеменә.*

**4. Был өҙөк ҡайһы шиғырҙан?** *Шифа тапһа бирәү сиренә һыуҙан, Зарар килер бирәүгә шул дарыуҙан.*

*а) «Һағыныу хаты»; г) «Дуҫҡа»; б) «Ҡайыш менән йукә»; г) «Бәйет» в) «Бер ҡалала гүзәл курҙем»;*

**5. М. Өмөтбаев рус шағирҙарынан кемдең әҫәрен башҡортсаға тәржемә итә?**

*а) А. Пушкин; г) А. Жуковский; б) М. Лермонтов; г) А. Некрасов. в) С. Никитин;*

**6. Р. Фәхретдинов ҡайһы йылдарҙа йәшәгән?**

*а) 1831 —1896; г) 1871 —1931; б) 1889—1976; г) 1859—1936. в) 1841—1907;*

**7. Р. Фәхретдинов тәүге мәҙрәсә һабағын ҡайҙа ала?**

*а) Өфөлә; г) Троицкиҙа; б) Шилселелә; г) Ҡазанда. в) Ырымбурҙа;*

**8. «Аҫар»серияһындағы китаптарын Р. Фәхретдинов кемдәргә арнай?**

*а) башҡорт, зыялыларыпа; г) бурҙарға; б) байҙарға; г) фәкирҙәргә. в) куп ер биләуселәргә;*

**9. Мысыр университетында белем алған ҡыҙ Фәхретдиновтың ҡайһы әҫәр геройы?**

*а) «Әсмә»; б) «Сәлимә».*

**10. Болғар дәүләте һәм тарихы тураһындағы мәҡәләләре Р. Фәхретдиновты ниндәй өлкә белгесе итеп күрһәтә?**

*а) яҙыусы; г) фольклорсы; б) тарихсы; г) сәйәсмән. в) мәғрифәтсе;*

**11. Р. Фәхретдиновтың «Әсмә» романында төп герой һуңынан ниндәй исем менән йөрөй?**

*а) Зәйнәп; г) Айһылыу; б) Сәлимә; г) Ғәзимә. в) Ғәлимә;*

**12. 1912 йылда ижад ителгән «Тормош ҡорбандары», «Ватан ҡаһармандары» пьесаларының авторы кем?**

*а) А. Таһиров; г) Д. Юлтпый; б) Ф. Туйкин; г) М. Ғафури. в) З. Ғ. Ниязбаев;*

**13. «Башҡорт хәле» шиғырының авторы кем?**

*а) М. Ғафури; г) З. Һаҙи; б) Д. Юлпгый; г) Аҡмулла. в) С. Ҡудаш;*

**14. «Этрәғәләмдәр» повесының авторы кем?**

*а) М. Ғафури; г) С. Ҡудаш; б) Д. Юлтпый; г) Ф. Сөләймәнов. в) А. Таһиров;*

**15. С. Якшығолов ҡайһы йылдарҙа йәшәгән?**

*а) 1831 —1896; г) 1871 —1931; б) 1889—1976; г) 1859—1936. в) 1841—1907;*

**16. С. Яҡшығолов «Уҡыу кәрәк, ғилем, һөнәр, башҡорттарым!» тип ҡайһы шиғырында өндәшә?**

*а) «Ҡурай»; г) «Башҡорт хәлдәре»; б) «Дим буйы»; г) «Таң апга». в) «Ваигкорт ағаларыма хитап»;*

**17. С. Яҡшығолов бөтә хеҙмәт ғүмерен ҡайһы ауылда йәшәп үткәрә?**

*а) Илсеғол; в) Яңы Яппар; б) Дәуләкән; г) Туҡһанбай.*

**18. Фәтхелкадир Сөләймәнов ҡайһы йылдарҙа йәшәгән?**

*а) 1831 —1896; г) 1871 —1931; б) 1889—1976; г) 1859—1936. в) 1841—1907;*

**19. Был юлдар ҡайһы шиғырҙан?** *Аямаған йәнен, гпуккэн ҡанын, Ил бирмэгэн яман-япыпарға.*

*а) «Башҡорт моңо»; в) «Батыр»; б) «Йәйләүҙе һағынғанда»; г) «Башҡорт егетенең йыры».*

**20. Ф. Сөләймәновтың ҡайһы хикәйәһе геройы рус араһына эшкә сығып китә, хатта исеме лә Тимофейға әйләнә?**

*а) «Башҡорт йәйләуендә»; г) «Үлэт»; б) «Ил өсөн» г) «Ҡурайсы Тимербай». в) «Ҡаскын»;*

**21. С. Мираҫ, Б. Бикбай, Д. Юлтый кеүек авторҙар бер үк сюжетка ижад иткән драманың исеме нисек?**

*а) «Батыр»; б) «Аҡшам батыр»; в) «Салауат батпыр».*

**22. А. Инандың «Башҡорт туйы» тигән хеҙмәте ҡайһы өлкәгә ҡарай?**

*а) тарих; г) тел; б) фольклор; г) эҙэбиэт. в) этнография;*

**Тест**

**I вариант**

**1. Һаңғырау тартынҡынан башланған һүҙҙе билдәләгеҙ:**

1. Жираф. 2. Бала. 3. Даға. 4. Ҡағыҙ.

**2. Ябыҡ ижектәрҙән торған һүҙҙе күрһәтегеҙ.**

1. Урам. 2. Ямғыр. 3. Ҡала. 4. Исем.

**3. Ҡайһы юлдағы мәҡәлдә антонимик иштәр бар?**

1. Көйҙөң оҙоно яҡшы, һүҙҙең ҡыҫҡаһы яҡшы.
2. Алғандың күҙендә, һатҡандың йөҙөндә булыр.
3. Тайы ат булғансы, эйәһе эт булған.
4. Ир башына эш төшһә, итеге менән һыу эсер.

**4. Күп мәғәнәле һүҙҙе билдәләгеҙ.**

1. Һабын. 2. Баш. 3. Ҡағыҙ. 4. Сәғәт.

**5. Ҡайһы һүҙгә эйәлек заты ялғауы дөрөҫ ҡушылмаған?**

1. Артисығыҙ. 2. Июле. 3. Һүрәтегеҙ. 4. Ирегең.

**6. Ҡайһы һүҙҙә ҡалын айырыу билдәһе яҙыла?**

1. Көн…яҡ. 2. Ар…яҡ. 3. Бир…яҡ. 4. Гөл…емеш.

**7. «Айыу майы һөртөү» фразеологик берәмеге ниндәй мәғәнәне белдерә?**

1. Ҡасыу. 2. Урлау. 3. Алдау. 4. Маҡтаныу.

**8. Ҡушма исемде табығыҙ.**

1. Сәйлек. 2. Ҡаҙанға. 3. Кәңәшмә. 4. Үҙҡиммәт.

**9. Кем? һорауына яуап булған һүҙҙәр төркөмөн билдәләгеҙ.**

1. Атай, ат, ҡуян. 2. Эт, суртан, Марат.
3. Рәмил, игенсе, балта оҫтаһы. 4. Дамир, айыу, бөркөт.

**10. Ҡайһы юлдағы сифат исемгә әүерелеп киткән?**

1. Кәңәшле ил аҙмаҫ, киң кейем туҙмаҫ.
2. Эш оҫтанан ҡурҡа.
3. Һауалағы торнанан ҡулыңдағы турғай артыҡ.
4. Алтын йүгән атты яҡшыртмаҫ. (Мәҡәлдәр).

**11. Ҡайһы сифат һыҙыҡса аша яҙыла?**

1. Ҡуйы ҡыҙыл. 3. Йәшкелт.2. Алтын һаплы. 4. Ҡап ҡара.

**12. Ҡайһы һандың яҙылышы дөрөҫ түгел?**

1. 7 – се рәт. 2. 1998-1999 йылдарҙа йәшәнем.
3. XX – се быуат. 4. 2002 йылдың 13 октябре.

**13. Рәүеште табып, төркөмсәһен билдәләгеҙ.**

*Һирәк-һаяҡ төҫһөҙ генә йондоҙҙар ҙа ҡалҡып сыҡты. ( З. Биишева)*

1. Төп рәүеш. 3. Күләм рәүеше
2. Ваҡыт рәүеше. 4. Сәбәп-маҡсат рәүеше.

**14. «Ул» алмашының төшөм килеш формаһын күрһәтегеҙ.**

1. Уға. 3. Унан. 2. Уны. 4. Унда.

**15. Аҫтына һыҙылған һүҙ ниндәй һүҙ төркөмөнән?**

*Көр ат һалмаҡ ҡына лерт-лерт юрта. ( Ф. Иҫәнғолов.)*

1. Оҡшатыу һүҙе. 3. Мөнәсәбәт һүҙ. 2. Ымлыҡ. 4. Теркәүес.

**16. Ҡайһы һөйләмдә киҫәксә бар?**

1. Ил өҫтөндә сәпсек үлмәй.
2. Ут менән һыу – телһеҙ яу.
3. Алтын янында тимер ҙә ялтырай.
4. Ҡаҙанға ни һалһаң, ҡалағыңда шул булыр. ( Мәҡәлдәр. )

**17. Бер составлы һөйләмде билдәләгеҙ.**

1. Был исем бик күптәр, бик күптәр өсөн үтә лә ҡәҙерле. ( Д. Бүләков)
2. Ҡыш етте. ( Ш. Биҡҡол )
3. Ул ауыртыуҙы тойманы. ( З. Биишева )
4. Көҙҙөң тымыҡ һары һағышына –
Һағышына көҙҙөң түҙ генә. (Р. Ғарипов )

**18. Һөйләмдең төрөн билдәләгеҙ**. *Айһыҙ, йондоҙһоҙ төн. ( З. Биишева )*

1. Билдәле эйәле һөйләм.
2. Билдәһеҙ эйәле һөйләм.
3. Эйәһеҙ һөйләм.
4. Атама һөйләм.

**19. Аҫтына һыҙылған һүҙ эргәһенә ниндәй тыныш билдәләре ҡуйыла?**

*Теге килен <u>меҫкен</u> бер икмәген ырғыта ла атын ҡыуалап алға саба. (З. Биишева)*

1. Ике яғынан да һыҙыҡ ҡуйыла.
2. Ике яғынан да өтөр ҡуйыла.
3. Бер яғынан һыҙыҡ, икенсе яғынан өтөр ҡуйыла.
4. Йәйәләр эсенә алына.

**20. Аҫтына һыҙылған һүҙҙәр һөйләмдең ниндәй киҫәге?**

*<u>Йәй</u> эшләһәң, <u>ҡыш</u> ашарһың. (Мәҡәл).*

1. Эйә.
2. Аныҡлаусы.
3. Тултырыусы.
4. Хәл.

**21. Һөйләмдең ниндәй киҫәктәре тиң булып килгән?**

*Беҙҙең яҡтарҙа айыу, бүре, төлкө, ҡуян, терпе йыш осрай. ( Н. Мусин)*

1. Эйә.
2. Аныҡлаусы.
3. Тултырыусы.
4. Хәл.

**22. Мөнәсәбәт һүҙҙе табып, ниндәй мәғәнә биҙәге биреүен асыҡлағыҙ.**

*- Юҡ, хәлфә. Шиғырҙарымды әлегә һеҙҙә ҡалдыра алмайым. ( Я. Хамматов)*

1. Ышанып етмәү, икеләнеүҙе.
2. Уй-фекерҙе кире ҡағыуҙы.
3. Тейешлек, кәрәклекте.
4. Үҙенсә һығымта яһауҙы.

**23. Ҡайһы һөйләмдә тура телмәр автор һүҙҙәренең уртаһында килгән?**

1. Тау бөркөтө һандуғастың
   Тауышына хайран ҡала:
   «Ниндәй нәфис моңло тауыш!
   Был моңдо ул ҡайҙан ала?» ( Ҡ. Даян)
2. – Һаумыһығыҙ, - тип Моратов менән алыҫтан ғына иҫәнләште Рәмилә. (Н. Мусин)
3. Халыҡ араһынан кемдер берәү: «Урмандарыбыҙға ҡот килә, ағай-эне!» - тип әйтеп һалды. (Н. Мусин)
4. – Бына! – Фәриҙә ялан аяғын күтәрҙе. – Итегең әллә ҡайҙа төшөп ҡалған. ( Н. Мусин)

**24. Һөйләмдә «гүзәлем» һүҙе ни өсөн ике яҡтан өтөр менән айырыла?**

- *Тәҙрәңә ҡара әле, гүзәлем, ниндәй йәмле ерҙәр, - тип маҡтаны генерал. (Ғ. Ибраһимов)*

1. Инеш һүҙ.
2. Өндәш һүҙ.
3. Айырымланған хәл.
4. Айырымланған аныҡлаусы.

**25. Ниндәй һүҙҙең тәржемәһе дөрөҫ билдәләнмәгән?**

1. Шифахана – санаторий.
2. Дарыухана - больница.
3. Мөхит – среда.
4. Асарбаҡ – бомж.

# Тесты по башкирскому языку для учащихся, изучающий башкирский язык как государственный (9 класс)

**Тест 1. Найдите правильный перевод: Теплый**

1) яҡшы 2)насар 3) матур 4)йылы 5)һалҡын

**Тест 2. Найдите правильный перевод:** *Моя мама работает в школе.*

1)Әсәй мәктәптә эшләй. 2)Әсәйем мәктәптә уҡый.

3)Минең әсәйем мәктәптә эшләй. 4)Әсәйем мәктәптә эшләй.

**Тест 3. Найдите неправильный ответ на реплику:** *Һау булығыҙ!*

1)Һау булығыҙ! 2)Хушығыҙ! 3)Хәйерле юл! 4)Иҫән булығыҙ!

**Тест 4. Найдие неправильное предложение:**

1. Мин театрға барҙым 2.Һин театрға барҙың. 3.Ул театрға барҙы.

4.Беҙ театрға барабыҙ. 5.Һеҙ театрға барҙылар.. 6.Улар театрға барҙылар.

**Тест 5. Найдите ошибку:**

1) туғыҙынсы 4) ҡырыҡынсы 2)унынсы 5) алтмышынсы 3)алты 6)туҡһанынсы

**Тест 6. К данному ответу найдите правильный вопрос: Беҙ кисә театрға барҙыҡ.**

1.Һеҙ театрға кем менән барҙығыҙ? 2.Һеҙ театрға ҡасан барҙығыҙ?

3.Һеҙ театрға барҙығыҙмы? 4.Һеҙ театрға нимә менән барҙығыҙ?

**Тест 7 Найдите правильный перевод:** *Сегодня тепло, но нет солнца.*

1.Бөгөн һалҡын, ләкин ҡояш юҡ. 2.Бөгөн йылы һәм ҡояш юҡ.

3.Бөгөн йылы, ҡояш юҡ. 4.Бөгөн йылы, ләкин ҡояш юҡ.

**Тест 8. Найдите неправильное предложение:**

**1.** Әсәйем – һатыусы 6.Ҡыҙы – уҡыусы 2. Атайым – уҡытыусы 7. Еңгәһе – бейеүсе

3.Апайым – тегеүсе 8. Дуҫының – шахматсы 4. Өләсәйебеҙ – һауынсы 9. Малайы – әҙәбиәтсе

5.Олатайыбыҙ – көтөүсе 10. Ағайҙары – рәссам

**Тест 9. Найдите правильное предложение** :

1.Азаттың книгаһы иҫке. 2.Зәлиәнең ағаһы заводта эшләй.

3.Фәриҙәнең әсәһенә уҫал. 4.Өләсәйҙе күҙлеге матур.

**Тест 10. Найдите ошибку:**

1.Мин аңлайым. 2.Мин тыңлайым. 3.Мин һөйләйем. 4.Мин уҡыймын. 5.Мин эшләйем.

**Тест 11. Найдите правильный перевод:** *Ул һеҙҙе һорай.*

1.Он вам говорит. 2.Он вас слушает. 3.Он вас спрашивает. 4.Он вас понимает.

**Тест 12. Найдите антоним:** *Иртән*

1)көндөҙ 2)кисен 3) төндә 4)ҡышын

**Тест 13. Выберите подходящий послелог:** ***Миңә милли ризыҡтар ... китап кәрәк.***

1)менән 2) тураһында 3)өсөн 4)табан

**Тест 14. Найдите антоним:** *Йылы*

1)тәмле 2)тоҙло 3)тәмһеҙ 4)әсе 5)һалҡын

**Тест 15. Найдите правильный перевод:** *Беҙ башҡортса ғына һөйләшәбеҙ.*

1.Мы по-башкирски понимаем. 2.Мы по-башкирски только говорим.

3.Мы по-башкирски только слушаем. 4.Мы говорим только по-башкирски.

**Тест 16. Найдите названия башкирского национального блюда:**

1) борос 4) һалма 2) бәлеш 5) бишбармаҡ 3) ит 6) былау

**Тест 17 Найдите правильный перевод:** *Они хотят изучать башкирский язык.*

1.Уларҙың башҡортса һөйләшкеләре килә. 2.Уларҙың башҡорт телен яҡшы белгеләре килә.

3.Уларҙың башҡорт телен өйрәнгеләре килә.

**Тест 18.. Найдите правильный перевод:** *Муйыл*

1) береза 4)черемуха 2) дуб 5) рябина 3)сосна 6)осина

**Тест 19. Выберите название птицы :**

1) кесерткән 2күгәрсен 3)тейен 4)йылан 5) үлән

**Тест 20. Вставьте пропущенные глаголы в предложения:**

*Айтуған Башкортостан тарихы тураһында китап ... .*

1) түләй 3) уҡый 2) ашай 4)эсә

**Тест 21. Имена существительные поставьте в нужном падеже:** *(Илдар) был кешеләр менән осрашырға кәрәк.*

1)ға, 2) ҙа 3) лар 4)дан

**Тәржемә өсөн текст.**

**Тәбиғәтте һаҡлағыҙ!**

Урман эсендә ут яғыу тыйыла.Бик кәрәк булған осраҡта,тәүҙә асыҡ урын һайлана һәм соҡор ҡаҙыла,урын әҙерләнә. Усаҡты ағастарға яҡын яҡмайҙар,сөнки ут ағас тамырҙарын,ботаҡтарын яндыра.Ул,ҡоро ботаҡтарҙан өсҡә үрелеп,башҡа ағастарға күсә.Утты ҡоро ағастар эргәһендә яҡмайҙар.Аҙаҡтан усаҡты ут һибеп һүндерәләр йәки тупраҡ менән күмеп ҡуялар.Янған хәлдә һәм шырпыны ла тирә-яҡҡа ташлау тыйыла.

**9-сы класс уҡыусылары өсөн әсә теленән олимпиада һорауҙары**

**1.Башҡорт теленә ҡәрҙәш булған телде билдәләгеҙ:**

а.Рус б.Үзбәк в.Немец

**2.Мәғәнәләренә ҡарап, һүҙҙәрҙе дөрөҫ урынлаштырығыҙ:**

1.Рецепт, аспирин, шприц а. Диалект һүҙе

2.Юл башы, кеше башы, ер башы б. Профессиональ һүҙ

3.Ағас еләге, әберсә в. Күп мәғәнәле һүҙ

**3.Төп башҡорт һүҙен табығыҙ:**

а. Торба б. Самауыр в. Тау г. Диспетчер

**4."Иғтибарға алып, ҡабул ителә, ярашлы, ҡарар ителә, көн тәртибе, ҡарарҙы тормошҡа ашырыу, саралар күрергә кеүек һүҙҙәр ҡайһы стилдә йышыраҡ осрай?**

А.Йәнле һөйләү стилендә Г. Фәнни стилдә

Б. Матур әҙәбиәт стилендә Д. Публицистик стилдә В.Рәсми эш ҡағыҙҙары стилендә

**5.Башҡорт телендә ниндәй тел стилдәре бар?**

а.Йәнле һөйләү һәм рәсми стилдәр б.Матур әҙәбиәт стиле генә

в.Йәнле һөйләү стиле, фәнни стиь, рәсми стиль, публицистик стиль, эш ҡағыҙҙары стиле

**6.Һөйләмдәрҙе аңлаткан мәғәнәләренә ҡарап урынлаштыр:**

1.Кешеләрҙең бер-береһе менән үҙ-ара аралашыу, фекер алышыу, теләктәрен сағылдырыу, тойғолар менән уртаҡлашыу сараһы

2.Кешеләр аралашыуының иң мөһим сараһы

3.Халыҡтың һүҙ оҫталары тарафынан эшкәртелгән, шымартылған һәм нормаға һалынған йәнле һөйләү теле

4.Хәҙерге әҙәби телдән айырылып торған һүҙҙәр йыйылмаһы

А. әҙәби тел Б. Тел В. Диалект

**7. Диалектҡа ҡараған һөйләштәрҙең урынлашыу тәртибен асыҡла:**

1.Балаҡатай, Мәсетле, Дыуан, Ҡыйғы, Салауат, Учалы, Әбйәлил райондары, Баймаҡ, Бөрйән райондарының төньяғы, Белорет районының төньяҡ-көнсығышы, Силәбе, Курган, Екатеринбург өлкәләрендәге башҡорттарҙың һөйләштәре.

2.Ейәнсура, Мәләүез, Баймаҡ райондарының көньяғы, Күгәрсен, Хәйбулла, Көйөргәҙе, Бөрйән, Ҡырмыҫҡалы, Белорет, Ишимбай, Ғафури, Нуриман райондарының көнбайышы, Федоровка, Стәрлебаш, Шишмә, Иглин райондары, Ауырғазы, Дәүләкән, Миәкә, Әлшәй, Бишбүләк, Нуриман райондарының көнбайышы.

Ырымбур өлкәһенең Александр, Гай, Красногвардейский, Ҡыуандыҡ, Новосергиевский, Октябрь, Переволоцк, Һарыҡташ, Төйләгән райондары.

Һамар өлкәһенең Больше-Черниговский, Больше-Глушицкий, Һарытау өлкәһенең Перелюб һәм Пугачев райондарындағы Һайылмыш, Һаҡмар, Тук, Соран, Ырғыҙ, Кәрәлек, Кәмәлек буйында йәшәгән башҡорттарҙың һөйләше.

3.Башҡортостандың төнъяҡ-көнсығышындағы Ҡариҙелдең урта ағымында, Төй, Сөн, Ҡармасан, Сәрмәсән, Ағиҙелдең түбәнге ағымында, Танып йылғалары буйында урынлашҡан Ҡариҙел, Аҫҡын, Балтас, Тәтешле, Борай, Яңауыл, Краснокама, Дүртөйлө, Илеш, Туймазы, Татарстандың Аҙнаҡай, Аҡтаныш, Әгрез, Минзәлә, Мөслим, Пермь өлкәһенең Ҡуйыҙа, Уса, Пермь, Чернушки һәм Барҙым райондарында йәшәгән башҡорттар һөйләше.

А. Көньяҡ диалект б. Көнбайыш диалект в. Көнсығыш диалект

**8.Башҡорт әҙәби телендәге стилдәрҙе дөрөҫлә:**

1.Телмәрҙә, үҙ-ара әңгәмәлә сағылған стиль

2.Күркәм әҫәрҙәр ижад иткәндә ҡулланылған стиль

3.Ниндәй ҙә булһа бер китапҡа, мәҡәләгә һәм башҡа материалға уның йөкмәткеһе, идея-йүнәлеше, тәғәйенләнеше, уның формаһы тураһында дөйөмләштерелгән характеристика биреү

4.Фәнни эҙләнеүҙәрҙең һөҙөмтәһен аңлатыу, тасуирлау өсөн ҡулланылған стиль

5.Ниндәй ҙә булһа бер фундаменталь мәсьәлә, техника, мәҙәниәт буйынса шул фәндәрҙең береһенән дә белгес булмаған киң масса укыусылар өсөн еңел һәм аңлайышлы тел һәм һөйләмдәр менән яҙылған хеҙмәт

6.Халыҡ араһында агитация эшендә ҡулланыла. Гәзит-журнал мәҡәләләре, әҙәби тәнҡит, төрлө мөрәжәғәттәр, белдереүҙәр, ижтимағи-сәйәси брошюралар, төрлө темаларға очерктар, фельетондар һәм памфлеттар яҙыуҙы ҡулланылған стиль.

7.Яҙыу-һыҙыу эштәрендә, рәсми аралашыуҙа ҡулланыла. Ул стиль кешеләрҙең төрлө дәүләт учреждениелары менән, шулай уҡ дәүләт учреждениеларының үҙ-ара аралашыуҙарын сағылдыра.

8.Боронғо замандарҙа уҡ айырым кешеләрҙең, дәүләт эшмәкәрҙәренең бер-береһе менән мөнәсәбәттәре махсус яҙышыу аша барыу

**9.Телмәрҙә һәр береһенең үҙенә генә ҡараған үҙенсәлекле билдәләре һәм һыҙаттары буйынса айырым бер функция үтәп йөрөүсе стилдәр**

А.Функциональ стилдәр Б. Аннотация В.Хаттар стиле Г. Фәнни стиль Д. Рәсми эш ҡағыҙҙары стиле

Е. Матур әҙәбиәт стиле Ж. Фәнни-популяр стиль З. Йәнле һөйләү стиле И. Публицистик стиль

**9.Тел ғилеменең ниндәй бүлеге телмәр өндәрен, уларҙың бүленешен, телмәрҙә үҙгәрешен өйрәнә?**

А. Синтаксис б. Морфология в. Фонетика г. Орфография

**10.Тел ғилеменең ниндәй бүлеге һүҙ төркөмдәрен, һүҙ үҙгәрешен өйрәнә?**

А. Синтаксис б.Орфография в. Морфология

# 9-сы класс уҡыусылары өсөн туған әҙәбиәттән олимпиада һорауҙары

**1.Түбәндәге образдарҙы үҙ урынына ҡуйып сыҡ:**
1.Йәнбирҙе, Йәнбикә, Самрау батша, Әзрәкә, Һомай, Ҡатил;
2.Туктамыш хан, Аҡһаҡ Тимер, Сәләхи бай, Һабрау;
3.Тарауыл ҡарт, Һәүбән, Аҡбуҙат, Шүлгән, Һомай, Нәркәс;
а)"Аҡбуҙат" эпосы; б)"Иҙеүкәй менән Мораҙым" эпосы; в)"Урал батыр" эпосы?

**2.Ҡобайырҙар кем тарафынан һәм ҡайҙа яҙып алынған:**
1."Урал батыр" 2."Аҡбуҙат";
а) Башҡортостандың Көйөргәҙе районындағы Бабалар ауылында йәшәгән Ғиниәт сәсән Бикҡужиндан Мөхәмәтша Буранғолов тарафынан 1917 йылда яҙып алынған;
б) Башҡортостандың хәҙерге Баймаҡ районындағы Иҙрис һәм Бәләкәй Этҡол ауылдарында йәшәгән Ғәбит һәм Хәмит исемле атаҡлы ҡурайсыларҙан халыҡ ижады әҫәрҙәрен йыйыусы Мөхәмәтша Буранғолов тарафынан 1910 йылда яҙып алынған?

**3.Традицион жанрҙарҙы дөрөҫлә:**
1.Төрлө им-том, ваҡыт, миҙгел, туй, йола поэзияһы;
2.Легенда, риүәйәттәр, көләмәстәр. Хайуандар, батырҙар тураһындағы һәм тылсымлы әкиәттәр, тормош-көнкүреш әкиәттәре;
3.ҡобайырҙар, батырҙар, тормош-көнкүреш тураһындағы иртәктәр. Әйтештәр;
4.Тарихи, тормош-көнкүреш, мөхәббәт йырҙары. Таҡмаҡтар. Исемһеҙ йырҙар.
5.Мөнәжәт, тарихи бәйеттәр, тормош-көнкүреш бәйеттәре;
6.Мәҡәлдәр, һынамыштар, әйтемдәр, йомаҡтар;
7.Уйындар. Балалар фольклоры;
а)героик эпос; б)бәйеттәр; в)әкиәт эпосы; г)йола поэзияһы; ғ)афористик ижад; д)йыр поэзияһы; е)халыҡ театры?

**4.Ҡобайырҙарҙың төркөмдәрен тап:**
1.һәр ырыуҙың сәсәне үҙ ырыуын, үҙҙәре йәшәгән төбәкте маҡтап ҡобайыр әйткән. Патриотик тойғоло, тыуған ергә, тыуған илгә һөйөү тойғоларын, ватансылыҡ тойғоһо, батырлыҡ тойғоһо менән бергә үрелә килә;
2.ҡобайырҙарҙың үҙәгендә тыуған илде дошмандан һаҡлар батырҙар образы тора;
3.Ололар һүҙе - итеп, йешене нисек булырға, яҡшы йәшәргә, кешеләргә изгелек күрһәтергә, алама, яман ҡылыҡтарҙы булдырмаҫҡа өндәгән ҡобайыр;
а) батырҙар тураһындағы ҡобайырҙар; б)тормош-көнкүреш (әҙәп-әхлаҡ) ҡобайырҙары;
в) тыуған ил тураһындағы ҡобайырҙар?

**5.Түбәндәге образдар ниндәй әҫәрҙән:**
1.Яҡуп, Зөләйха, Таймус.
2.Ҡарасәс, Зәйтүн, Искәндәр, Сөләймән, Ҡаҙарман, Ғәли.
3.Бурнаҡ бей, Йәдкәр мырҙа, Тәтегәс бей, Аҙнай баба, Илсекәй Тимер баба, Ҡармыш баба.
4.Мөйтән, Шәғәли, Беҙек бей, Йөрәк бей, Урал бей, Толобай
А.Үҫәргән ырыуы шәжәрәһе Б. Юрматы ырыуы шәжәрәһе
В."Буҙъегет" поэмаһы Г. "Ҡисса -и Йософ" поэмаһы

**6. Салауат образы сәнғәттә:**
1."Салауат" операһының авторы а. З. Исмәғилев
2.Атаҡлы һыбай һәйкәлен төҙөүсе скульптор б. Т. Нечаева
3.Бюстын яһаусы скульптор в. С.Тавасиев
4.Портретын яһаусы рәссамдар г. Р. Мостафин, Ишбулатов, Ә.Лотфуллин

**7.Башкорт халкының томошоноң сағылышын күрһәткән авторҙарҙың әҫәрҙәрен дөрөҫлә:**
1.А.С.Пушкин а. "Һүнә барған Башҡортостан", "Әмилә"
2.Л.Толстой б. "Телһеҙ"
3.М. Салтыков-Щедрин в. "Башҡорт бөтә"
4.Г.Успенский г. "Сит илдәрҙә"
5.М.Горький д. "Ильяс"
6.Н.Крашенников е. "Капитан ҡыҙы"

**8.Әҫәрҙәрҙең авторҙарын дөрөҫлә:**
1."Урыным - зиндан...", "Мәжлесенә ҡарай ғына", "Инсафлыҡ" 3."Әсмә"
2."Йомран иле", "Бөйөк шағир А.Пушкин", "Башҡорттар" 4."Башҡорт ағаларыма хат", "Дим буйы", "Ҡитға"
А. Р.Фәхретдинов в. М.Аҡмулла Б. С.Яҡшығолов г. М.Өмөтбаев

**9.Түбәндәге образдарҙы дөрөҫ урынлаштыр:**
1.Шәкерт, Сәлимә, Фараби, Сәғди, Хафиз, Фирҙәүес 2.Ғәббәс мулла, Ғәйшә, Зәйнәп, Йософ, Ғәли
А. "Әсмә" Б. "Сәлимә"

**10.Аңлаткан мәғәнәләренә ҡарап, яҙыусыларҙы тап:**
1.Әҫәрҙәрендә халыҡты мәғрифәткә өндәүсе, феодаль иҫкелеккә, дини фанатизмға ҡаршы көрәш, халыҡ педагогикаһын сағылдырыусы, поэтикаһында башҡорт, ҡаҙаҡ фольклоры традицияларын дауам итеүсе сәсән телле шағир.
2.Имам, ҡазый, мөфтөй, журналист. Балалар һәм ололар өсөн нәсихәт, ғаилә тәрбиәһе, әҙәп-әхлаҡ мәсьәләләренә арналған йыйынтыҡ авторы.
3.Мәғрифәтсе һәм шағир. Рус телен һәм мәҙәниәтен ныҡлап үҙләштергән эшмәкәр. Башҡортостандың тарихы, этнографияһы, фольклоры буйынса хеҙмәт авторы.
а) Р.Фәхретдинов. б) М. Өмөтбаев в) М.Аҡмулла.

**Рус мәктәптәре өсөн башҡорт (дәүләт) теленән олимпиада һорауҙары (9 класс)**

**1.Мәғәнәләре буйынса ҡушма һүҙҙәр табып яҙығыҙ.**

1)Алма бирә торған ағас. …

2)Күлдә йәшәүсе аҡ төҫтәге күсмә ҡош. ….

3)Өҫтәлгә япма. ….

**2.Хәбәр, һорау, өндәү һөйләмдәргә берәр миҫал яҙығыҙ.**

**3.Төшөп ҡалған һүҙҙәрҙе өҫтәп яҙығыҙ.**

1)Эш оҫтанан …

2)Күл тамсынан …

3)Аҙ һөйлә, күп …

4.**Йылға, күлдәр ниндәй районда урынлашҡан? Уҡ менән күрһәтегеҙ**.

| | |
|---|---|
| Асылыкүл | Дәүләкән |
| Кандракүл | Мәләүез |
| Эйек | Туймазы |
| Йүрәҙән | Күгәрсен |
| Нөгөш | Салауат |
| Һаҡмар | Баймаҡ |

5.**Буш шаҡмаҡтарға тейешле хәрефтәрҙе яҙығыҙ**.

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| б | ы | | | л |
| б | | й | | к |
| ҡ | ы | | | ҡ |
| т | е | | | н |
| | | л | ғ | а |
| м | у | | | л |

6.**Үҙегеҙҙең дуҫығыҙ тураһында 5 һөйләм яҙығыҙ.**

*7. “Укытыусыма”* **шиғырының авторы кем?**

8.**Һөйләмдәргә һорауҙар уйлап яҙ.**

1) Мин Башҡортостан Республикаһында йәшәйем.
2) Башҡортостандағы иң ҙур күл – Асылыкүл.
3) Ул Дәүләкән районында урынлашҡан.

**Рус мәктәптәре өсөн башҡорт (дәүләт) теленән текст (9 класс)**

**Үҙ тыуған яғығыҙҙы өйрәнегеҙ, яратығыҙ!**

Беҙҙең Тыуған илебеҙҙең тәбиғәте бик матур. Унда төрлө –төрлө хайуандар һәм үҫемлектәр бик күп. Китаптарҙан һәм укытыусыларҙың һөйләүенән, һеҙ Каспий диңгеҙендә ниндәй балыҡтар булыуын, Себерҙә ниндәй ағастар үҫеүен, Урал ниндәй файҙалы ҡаҙылмаларға бай булыуын беләһегеҙ.

Ә һеҙ, укыусылар, үҙ тыуған яғығыҙҙы беләһегеҙме? Һеҙ йәшәгән яҡтарҙың урмандарында ниндәй хайуандар һәм ҡоштар барлығын, унда ниндәй ағастар үҫеүен, күл һәм йылғаларҙа ниндәй балыҡтар йөҙөүен беләһегеҙме? Һеҙҙең тыуған яғығыҙҙа ниндәй үҫемлектәр үҫеүен билдәләме? “Үҙегеҙҙең тыуған яғығыҙҙы яратығыҙ! Үҙегеҙҙең тирә-яғығыҙҙағы тәбиғәтен күҙәтегеҙ, өйрәнегеҙ һәм һаҡлағыҙ!”

*(Академик С.И.Вавиловтан)*

**9 класс**

1. Нимә ул һүҙҙең лексик һәм грамматик мәғәнәһе?
2. Ҡушма һүҙҙәргә миҫалдар килтерегеҙ.
3. Сифат һүҙ төркөмөнә аңлатма бирегеҙ. *Йылы* сифатын барлыҡ дәрәжәлә ҡуйып яҙығыҙ.
4. Һөйләмдәр ниндәй киҫәктәрҙән тора? Миҫалдар яҙып аңлатығыҙ.
5. Һөйләмдә тейешле тыныш билдәләрен ҡуйығыҙ:

*Артабан ул Беүә Танып Әтәр Төй кеүек йылғаларҙы артта ҡалдырып Ирән буйҙарына килеп сыҡты. (К.Мәргән)*

6. Нимә ул текст?
7. Ғ.Хөсәйеновтың кейек-хайуандарға, аттарға, тәбиғәткә һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү темаһы күтәрелгән әҫәре нисек атала?
8. Яҙыусыларҙың әҫәрҙәрен билдәләгеҙ.

| | |
|---|---|
| М.Ғафури | “Салауат батыр”, “Ҡурайҡайға” |
| Ш.Бабич | “Йәмле Ағиҙел буйҙарында” |
| Р.Ниғмәти | “Мин ҡайҙа”, “Гөлдәр баҡсаһында” |

9. “Оҙатыу”, “Көтөү” картиналарының авторын яҙығыҙ.
10. Бирелгән теманы дауам итеп, 5-7 һөйләм яҙығыҙ.

*Ап-аҡ ҡар яуа…*

**Рус мәктәптәре өсөн башҡорт (туған) теленән һәм әҙәбиәттән инша темалары: 9-сы кластар өсөн**

1. 2016 йылдың сағыу хәтирәләренән.
2. С.Юлаев шиғырҙарында Тыуған илдең матурлығын данлау.
3. Башҡорт сәхнәһенең ынйыһы
4. “Төньяҡ Амурҙар” романында 1812 йылғы Ватан һуғышында башҡорт полктары күрһәткән ҡаһарманлыҡ.
5. А.Игебаев ижадында илһөйәрлек темаһы.

# Үҙ аллы һәм ярҙамсы һүҙ төркөмдәре буйынса тест һорауҙары (9-сы класс)

**1. Һүҙ төркөмдәрен тел ғилеменең ниндәй бүлеге өйрәнә?**
А) Синтаксис б) Фонетика в) Морфология г) Пунктуация

**2. Ярҙамсы һүҙ төркөмөн билдәләгеҙ:**
А)Исем б)Ҡылым в)Ымлыҡ г)Рәүеш д) Һан е) Алмаш ж) Сифат

3. *Алмағас, Ағиҙел, ҡыҙылғанат* **һүҙҙәре ниндәй юл менән яһалған?**
А) ҡушыу б) парлау б) бәйләү в) яһалма

**4. Һәҙиә, Инйәр, Йөйәк, Аҡбай. Был исемдәр ниндәй төркөмгә ҡарай?**
А) Яңғыҙлыҡ б) уртаҡлыҡ

**5.** *Тимер юл, ҡурай еләге, таш күмер* **исемдәре ниндәй юл менән яһалған?**
А) ҡушыу б) парлау в) бәйләү г) ҡыҫҡартыу

**6.** *Яҙаһың, яҙаһығыҙ* **ҡылымдары ниндәй затта килгән?**
А)1-се зат б) 2-се зат в) 3-сө зат

**7.** *ҡайта, ҡарай, уҡымай* **хәбәр һөйкәлеше ҡылымдары ниндәй заманда килгән?**
А)Үткән заман б) хәҙерге заман в) киләсәк заман

**8.** *Уйна, уйнағыҙ* **ҡылымдары ниндәй һөйкәлештә тора?**
А) теләк б) хәбәр в) шарт г) бойороҡ

**9. Сифат нимәне белдерә?**
А) предметтың атамаһын б) ....эшен в) ....билдәһен г) иҫәбен

**10**. <u>Ҡалала бейек-бейек йорттар бар</u> **һөйләмендә сифат нисек яһалған?**
А)ҡабатлау юлы менән б) парлау юлы менән в) бәйләү юлы менән

**11**<u>. Ҡуян һорғолт төҫкә ингән</u> **һөйләмендә сифат ниндәй дәрәжәлә ?**
А) төп б) артыҡлыҡ в) аҙһытыу г) сағыштырыу

**12. Шартлы сифаттарҙы күрһәтегеҙ:**
А) матур б) киске в) ҡыҙыл г) баҡсалағы д) шаян

**13. Ике, өс, алтмыш – был һандар ниндәй төркөмсәгә ҡарай?**
А) төп б) кәсер в) үлсәү г) рәт д) йыйыу е) сама ж) бүлеү

**14. Рәт һандарының ҡайһыһында ялғау яҙылмай?**
А) 1 – парта б) 20- мәктәп в) 22- апрель г) Сәғәт 5- китте.

**15. Ҡайһы һан сама һанына ҡарамай?**
А)унлаған б) унау в) унлап г) ун тирәһе д) туғыҙ-ун е) ун самаһы

**16. Рим цифрҙарында ялғауҙар нисек яҙыла?**
А) ҡушылып б) һыҙыҡса аша в) айырым г) яҙылмай

**17**. *Был , ул, шул* **алмаштары ниндәй төркөмгә ҡарай?**
А)зат б) күрһәтеү в)һорау г) билдәләү д) билдәһеҙлек е) эйәлек ж) юҡлыҡ

**18. Минеке, һинеке , уныҡы – был алмаштар ниндәй төркөмгә ҡарай?**
А)зат б) күрһәтеү в)һорау г) билдәләү д) билдәһеҙлек е) эйәлек ж) юҡлыҡ

**19.** <u>Тауыш бик яҡын ишетелде</u> **һөйләмендә рәүеш ниндәй төркөмсәгә ҡарай?**
А) ваҡыт б) урын в)оҡшашлыҡ г)күләм-дәрәжә д) сәбәп-маҡсат

**20.** <u>Ул матур сәскә төшөрә</u> **һөйләмендә** <u>матур</u> **һүҙе ниндәй һүҙ төркөмөнә ҡарай?**
А) сифат б)рәүеш

**21.** <u>Ул сәскәне матур төшөргән</u> **һөйләмендә** <u>матур</u> **һүҙе ниндәй һүҙ төркөмөнә ҡарай?**
А) сифат б)рәүеш

**22. ҡайһы рәүештәр сағыштырыу дәрәжәһендә килгән?**
А) Бик шәп, иң ҙур , ифрат матур Б) алыҫыраҡ, матурыраҡ, юғарыраҡ В)алыҫ, шәп, юғары

**23**<u>. Атты ҡалдыра ла өйгә инә</u> **һөйләмендә** <u>ла</u> **һүҙе ниндәй һүҙ төркөмөнә ҡарай?**
А) теркәүес б)бәйләүес в)киҫәксә г) ымлыҡ д) мөнәсәбәт һүҙ

**24.** <u>Көн тиҙ арала боҙолдо ла ҡуйҙы</u> **һөйләмендә** <u>ла</u> **һүҙе ниндәй һүҙ төркөмөнә ҡарай?**
А) теркәүес б)бәйләүес в)киҫәксә г) ымлыҡ д) мөнәсәбәт һүҙ

**25.** <u>Көн төшкә табан асылып китте</u> **һөйләмендә** <u>табан</u> **һүҙе ниндәй һүҙ төркөмө?**
А) теркәүес б)бәйләүес в)киҫәксә г) ымлыҡ д) мөнәсәбәт һүҙ

**26**<u>. Гел генә уның тураһында уйлайым</u> **һөйләмендә ярҙамсы һүҙ төркөмдәрен табығыҙ:**
А) гел б) генә в) уның г) тураһында д) уйлайым

**27.** <u>Дөрөҫ, был юлы һин хаҡлы</u> **һөйләмендә** <u>дөрөҫ</u> **һүҙе ниндәй һүҙ төркөмө?**
А) теркәүес б)бәйләүес в)киҫәксә г) ымлыҡ д) мөнәсәбәт һүҙ